БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА В УСЛОВИЯХ ГЛОБАЛИЗАЦИИ
И ПОЛИЭТНИЧЕСКОЙ СРЕДЫ: ОПЫТ И ПЕРСПЕКТИВЫ

ISBN 978-5-91608-181-7 С. 396-400

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.075

УДК 398.21

**Г. Р. Хөсәйенова**

*Ордена Знак Почета Институт истории, языка и литературы УФИЦ РАН*
*проспект Октября, 71, Уфа, 450054, Россия*
*E-mail: bashfolk@yandex.ru*

# ҒИЛМИ АРХИВТА ҺАҠЛАНҒАН РУХИ ХАЗИНАЛАР

(З. Биишеваның 1946 йылда яҙып алған әкиәттәре)

Данная статья посвящена анализу 11 текстов сказок, записанных в 1946 г. в Кугарчинском районе народным писателем З.А. Биишевой от двух информантов. Нами определены их сюжетные типы по международному каталогу Аарне-Томпсона-Утера. Судя по текстам, в основном это сказки волшебно-героического характера, сюжеты которых хорошо известны и включены в книги многотомников “Башкирское народное творчество” на башкирском и русском языках. Отмечаются отличительные места, особенности поэтики и стиля вводимых в научный оборот сказок.

*Ключевые слова:* сказки, сюжетный тип, варианты, стиль, поэтика.

Өфө федераль ғилми тикшеренеү үҙәгенең ғилми архивында әйләнешкә инмәй ятҡан материалдар бихисап. Шулар араһында талантлы яҙыусыбыҙ Зәйнәп Абдулла ҡыҙы Биишева яҙып алғандары ла һаҡланған. Һуңғы йылдарҙа билдәле фольклорсыбыҙ Фәнүзә Айытбай ҡыҙы бер нисә мәртәбә томға З. Биишева яҙып алған дүрт әкиәт инмәгән, шуларҙы күтәрергә кәрәк ине тип әйткәне булды. Ниһәйәт, ул әйткән материалдар менән танышыу форсаты тейҙе. Юҡҡа ғына борсолмаған ғалимәбеҙ. Әкиәттәр 73 йыл элек Күгәрсен районының Санъяп ауылында Мәксүт балалар йортонда тәрбиәсе булып эшләгән 20 генә йәшлек Хаят Ғәҙелхаҡ ҡыҙы Ишбаеванан [Архив, ф. 3, яҙма 2, һаҡлау берәмеге 143, 1-70] һәм Туйымбәт ауылында колхозсы Абуталип Ғәлиәскәр улы Аҡбәровтан (55 йәштә) [Архив, шул уҡ, 157-197] һөйләтеп яҙып алынған. Әгәр әкиәтсе ҡыҙ “Шәмшруҡ” (АТУ 502), “Балыҡсы ҡарт”(АТУ 303), “Тимерсе егет” (АТУ 400), “Алтын тау” (әкиәт-легенда), “Һөнәрле егет” (отчасти АТУ 654 В*), “Ҡырыҫ ҡанат” (АТУ 315) исемле алты әкиәт һөйләгән булһа, икенсе информанттан әҙибә “Алтын балдаҡ” (АТУ 560), “Сауҙагәр Сәғит” (АТУ 567+ АТУ 303+АТУ 566), “Алтын ҡош” (начало АТУ 551+АТУ 550), “Алтын тараҡ” (АТУ 567+АТУ 518), “Люндун” ( АТУ–.) тигән әкиәттәр яҙып алған. Яҙып алыусының билдәләүенсә, ике кешенән дә “Әкиәттәр уның һөйләүенсә, һис бер үҙгәрешһеҙ яҙып алынды”. Халыҡ ижады әҫәрен ошо принцип менән яҙып алыу – фольклор фәненең талабы һәм З. Биишеваның материалдары уға тулыһынса яуап бирә: әкиәт текстары бөтөн, халыҡсан телле, йәнле һөйләү теле, жанрҙың стиль үҙенсәлектәре яҡшы һаҡланған, тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар әлегә тиклем баҫылып сыҡмаған һәм ғилми әйләнешкә инмәгән.

Өҫтә һанап үтелгән һәр әкиәттең традицион башламы һәм тамамланышы, медиаль формулалары бар йәғни уларҙа жанрҙың стиле һаҡланған. Түбәндәге миҫалдар шуны раҫлай: "*Борон-борон заманда бер йылға буйында", "донъя көтөп, йөн тетеп торалар, ти", "Мин дә уларҙа ҡунаҡта булдым. Кисә барҙым, бөгөн ҡайттым, бер самауыр сәй эстем", "ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат", "ел-дауыл сығарып, теге ҡош килеп етте, ти", "күҙ асып күҙ йомғансы", "алыш кәрәкме, көрәш кәрәкме", "тиреләрен энә менән тунап, иттәрен (кәүҙәләрен авт.) быуын-быуын турап ташлағыҙ, ти" һ.б.* Һүҙ барған архив текстарында башҡорт халыҡ әкиәттәренә хас уртаҡ мотивтар ҙа бихисап. Мәҫәлән, әбей менән бабайҙың балаһы булмауы, алтын балыҡтың бер тән өлөшөн ашауҙан бала, ҡолон, көсөк тыуыуы йәғни геройҙың мөғжизәле тыуыуы, буласаҡ тылсымлы ярҙамсыға изгелек эшләү, аждаһаның ҡыҙҙы йоторға килеүе, батшаның геройға ауыр эштәр ҡушыуы, геройҙың бәләгә осраған өлкән ағаһын ҡотҡарыуы, алтын яллы, көмөш тояҡлы ат, алтын сәсле ҡыҙ артынан барыу һ.б.

Ҡулъяҙмалағы һәр әкиәттең тиерлек варианттарын "Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр" томдарында табырға мөмкин. Мәҫәлән, "Шәмшруҡ" исемле әкиәт тылсымлы-героик әкиәттәр төркөмөнә ҡараған "Ҡыуылған егет" әкиәтен хәтерләтә [БХИ, 1976 (1), 43-49]; "Балыҡсы ҡарт" – батырҙар тураһындағы әкиәт төркөмөнә ингән "Алтын сабаҡ"ты [БХИ, 1976 (1), 220-222], "Тимерсе егет" әкиәтендә тыйылғанды үтәмәгән егет һынауҙарға дусар була һәм юғалған ҡатынын ҙур ҡыйынлыҡтар менән барып таба; "Алтын тау" – әкиәт-легенда. Алтын тауҙы эҙләп килгән егет шунда ҡәберен таба. "Һөнәрле егет" – "Әминбәк" әкиәтенең баш өлөшө. Әкиәт егеттең сауҙа эшенә өйрәнмәй скрипкала, шахмат уйнарға, яҙыу яҙырға өйрәнеп ҡайтыуы тураһында бәйән итә. Әкиәт бабайҙың сауҙа һөнәренә өйрәнмәгән улын ҡыуып ебәреүе менән тамамлана. Баҫылған билдәле вариантта ("Әминбәк") был әкиәттең дауамы бар һәм егет үҙе алған һөнәрҙәре ярҙамында батша булып китә. "Ҡырыҫ ҡанат" әкиәтендә геройҙың һеңлеһенең йәки әсәһенең дейеү менән йәшәп, был турала белмәгән геройҙы үлтерер өсөн төрлө һынауҙарға дусар итеүе тураһында һүҙ бара.

"Алтын балдаҡ" әкиәте –халыҡ араһында киң таралған сюжеттың варианты. Был әкиәттә геройға тылсымлы йөҙөктө улын ҡотҡарғаны өсөн Аҡ йыландың атаһы бүләк итә. Баҫылып сыҡҡан варианттарҙа тау башында Аҡ йылан менән Ҡара йыландың һуғышыу эпизоды юҡ.

"Сауҙагәр Сәғит" әкиәте –"Башҡорт халыҡ ижады" томында донъя күргән "Ике бер туған" һәм "Һомай ҡош" [БХИ, 1976 (2), 164-166; 166-169], әкиәттәренең варианты. Тик унда батша һайлағанда ҡош башын ашаған егеттең иңбашына, баҫылған варианттағы һымаҡ, һомай ҡош ултырмай [БХИ, 1976 (2), 167], ә фил уны урмандан ҡалаға эйәртеп алып килә һәм егетте батша итеп һайлап ҡуялар. Баҡсаһында батша алтын башлы, көмөш күтле ҡуян күреп баҫтыра башлай. Ҡуян ҡыҙға әйләнеп, сыбыҡ менән һуғып тәүҙә егеттең йәнлектәрен, шунан үҙен ташҡа әйләндерә ("Ике бер туған" вариантында ҡыҙ түгел, дейеүҙең сихырсы ҡарсығы "*сыбыҡ менән ҡыйнап, тәүҙә йәнлектәрҙе, унан егетте үлтерә*" [БХИ, 1976 (2), 166]. Был әкиәттә тағы бер сихырсы ҡарсыҡты туғандарҙың кесеһенең ҡатыны яллап, "*егетте ҡоҫтороп, алтын төкөрөүен бөтөртә*" [Архив, 166]. Һуңынан "*ҡыҙ теге сихырсы әбейҙе китертеп, егеткә алтын төкөрөү хасиятын кире ҡайтарырға ҡуша*"Архив,168]. Был типтағы әкиәттәрҙә ғәҙәттә иренә тоғро булмаған ҡатын уның тылсымлы әйберен урлай, ә һәләтенән мәхрүм итеү – һирәгерәк осраған мотив.

"Алтын ҡош" – шул уҡ исемдәге әкиәттең варианты [Ҡара: БХИ, 1976 (2), 55-62]. Унда баҫылған вариантта булмаған ҡайһы бер эпизодтар иғтибарҙы йәлеп итә: бабайҙың кесе улы алма баҡсаһын ҡарауыллағанда алма урлаған алтын ҡоштоң "*бер йөнөн йолҡоп алып ҡала*" [Архив,170]; күк бүре егетте киҫәтә, ҡайтып еткәнсе йоҡламаҫҡа ҡуша; ҡоҙғон балаһы үлеп ятҡан егеттең күҙен соҡорға торғанда ғына, бүре уны тотоп алып әсәһенә үле-тере һыуын табып алып килергә ҡуша.

"Алтын тараҡ" – "Һомай ҡош" әкиәтенең версияһы. Айырмалы урындары бихисап: һунарсы һыу буйында алтын тараҡ табып ала, шуны һыҙғыртһа, ике һалдат килеп сығып, егеттең йомошон үтәй; егет батша ҡыҙын һоратһа, ҡыҙҙың атаһы риза булмайынса ғәскәр ебәрә; батша егетте еңә алмағас, ҡыҙын уға бирергә мәжбүр була; ҡыҙ егеттең серен белгәс,

унан ҡотола; егет урманда ҙур мөгөҙ үҫтерә торған ҡыҙыл емеш менән мөгөҙҙө бөтөрә торған ҡара емештәрҙе йыйып ала ла, ҡалаға юллана; юлда бер ҡарт уға ҡартайта һәм йәшәртә торған ике шешә һыу бирә; емештәрҙе кәнизәге аша биреп батша ҡыҙына ашата ла, 100 йәшлек ҡартҡа әүерелеп, табип сифатында ҡыҙ янына килә; ҡыҙҙы туҡмай, тылсымлы әйберҙәрен килтертергә ҡуша; үҙенең батшалығына алып ҡайтһа, ҡатыны тағы хыянат итә; егет тағы тылсымлы әйберҙәренән яҙа; һунарҙа бер өйрәк атып алһа, ул дейеү ҡыҙы булып сыға; олатаһының сигналын алып килеп, батша ғәскәрҙәрен ҡыйраталар, ә хыянатсы ҡатынын егет мискәгә һалдыра ла диңгеҙгә ырғыттыра. Был әкиәт миҫалында жанрға хас өс мәртәбә ҡабатлау принцибын асыҡ күрергә була: егет өс мәртәбә тылсымлы предметтарға эйә була, өс мәртәбә уларҙан ҡолаҡ ҡаға; ҡатыны уға өс мәртәбә хыянат итә.

Сираттағы “Люндун” әкиәте бик үҙенсәлекле булып, традицион сюжетҡа замандың театрға, ресторанға йөрөү, эскелек кеүек күренештәре килеп ингән. Тылсымлы ярҙамсы һәм кәңәшсе функцияһын да әкәттә бөтөнләй ғәҙәти булмаған бубновый туз атҡара.

Әкиәттә ваҡиғалар Лондон ҡалаһында бара; бер байҙың улы ресторанға йөрөргә әүәҫләнеп китә; атаһы аҡса бирмәй башлағас, егет атаһының бер һандыҡ алтынын урлай ҙа, бер айҙа иптәштәре менән эсеп бөтөрә; аҡсаһы бөткәс, иптәштәре егетте ҡыуалар, ул ҡара урманда бер өйгә барып керә; әбей урынлаштырған бүлмәлә бер колода кәрт таба; бубновый туз уң яҡ стеналағы кнопкаға баҫып, ҡорал бүлмәһенән ҡылыс алып сығырға ҡуша; егет 15 кешенең башын сабып өҙә; бубновый туз уға өйҙәге алтынды тройкаға тейәп, урлап алып киленгән ҡыҙҙы ултыртып ҡайтып кит, ти; ҡалаға еткәс тройканан төшөп ҡлырға ҡуша; егет үҙенә етерлек алтын ала ла, төөшөп ҡала; туз уға юлында осраған беренсе ҡатынға өйлән, ти; егеткә ҡыҙ бала етәкләгән әбей осрай, егет уларҙың землянкаһына эйәреп ҡайта; ҡыҙҙы уҡырға бирәләр духтырлыҡҡа; туздың әйтеүе буйынса, егет шул ҡыҙға өйләнә; ресторанға барғанда ике генералға егет асып булмай торған магазиндарҙың ишеген асырға вәғәҙә итә; туз уға йөҙ йыл ятҡан китапты һатып алып уҡып сығырға ҡуша; егет китапты өсөнсө төн уҡығанда бер ҡарт асҡыс кертеп бирә; егет ишектәрҙе аса, бик бай булып китә; генералдар хәйлә менән быының магазиндарына хужа булалар; ҡатынын хыянатта ғәйепләп, егет уны гробҡа һалып һыуға ырғыта; гробты балыҡсы тотоп алып ҡайта; ҡатын ирҙәр кейемендә кешеләр дауалап йөрөй; губернатор ҡатынын балаһын үлтереп шуның ҡанын эсереп ҡотҡара алам ти был духтыр ҡатын; ул бала өҫтөндә ҡылыс күтәрһә, губернатор ҡатыны ҡысҡырып ебәрә лә, ҡаны йөрөп китә, бала ла, ҡатын да тере ҡала; хаҡына духтыр ҡатын өс көн губернатор булырға һорай; генералдарға суд ойоштора; һуҡтырып, дөрөҫөн һөйләтә; ирен эҙләтеп таптыра.

“Шәмшруҡ” әкиәтендә егеттең батша ҡушҡан эште үтәгәндән һуң шул урынды тасуирлаған урыны ла бик үҙенсәлекле: “*...Егет теге урынды барып ҡараһа, ағасы ҡырҡылған, өйөлгән, һөргән ерендә һабаны, сәскән урында сәскесе, тырмаған урында тырмаһы, урған ерендә урағы, һуҡҡан ерҙә шыбағасы ятып ҡалған, ти*” [Архив, 8]. Тәү ҡарашҡа, тотонған эш ҡоралдарының урынына илтеп ҡуйылмауы кире ҡараш уята, икенсе яҡтан, уларҙың шулай эш урынында ятыуы – эшләнгән эштең ысынбарлыҡҡа тура килеүен раҫлаусы дәлил. Һәр хәлдә, был жанрға хас ҡабатлау күренеше булараҡ ҡабул ителә. “Шәмшруҡ” әкиәтенең тағы бер мөһим үҙенсәлеге шунда: әкиәттең башында һунар табышы булып, суйын келәткә бикләнгән был ҡош үҙен тотҡонлоҡтан ҡотҡарыусы егеттең тылсымлы ярҙамсыһы сифатында сығыш яһап, батшаның ауыр эштәрен атҡарырға ярҙам итһә, әкиәттең аҙағында ул геройҙың антагонисына әүерелә. Ваҡиғалар теҙмәһе шул тиклем күп, шыма ғына киләләр ҙә, көтмәгәндә, геройҙың аты егеткә былай ти: “*Был аждаһаны тиҙ генә еңә алмаҫһың. Ул – беҙҙе оло ағабыҙ Шәмшруҡ. Ә мин уның иң кесе һылыуы. Мин һиңә ярҙам иткәс итермен инде, бер туған ағайыма ҡаршы һуғышырға тура килә*” [Архив, 17].

Һүҙ барған әкиәттә поэтик табыштар ҙа бар. Мәҫәлән, һуғыштың ҡаты булыуын дәлилләгән һүрәтләү сараһының ошондай өлгөһө табылды: “*Һуғыш шул тиклем ҡаты булды, йәшел үлән аттың тубығынан булырлыҡ саңға әйләнде, ти*” [Архив, 21] – ғәҙәттә әкиәттәрҙә, алыш мәлендә герой антагонисын тубығынан, биленән, муйынынан ергә батырғансы күтәреп һуға; “*мин еңһәм, һыу өҫтөнә аҡ күперек ҡалҡыр*” [Архив, 18] – аҡ төҫ

шатлыҡ, бәхет символикаһын сағылдыра, ә “Шәғәле” әкиәтендә геройҙың бурҙайҙары мәскәй әбей артынан күл төбөнә төшөр алдынан: “Ҡыҙыл ҡан сыҡһа, беҙ үлгән булырбыҙ, ҡара ҡан сыҡһа, мәскәй үлгән булыр”, – тиҙәр. Һыу өҫтөнә “урғып-урғып ҡара ҡан сыға” [БХИ, 1976 (1), 196] – ҡара төҫтәге ҡан ҡара көстөң һәләк булыуын символлаштыра; һандыҡ эсендә бейек тау башына килтереп ташланған геройҙың тауҙан төшөү ысулы ла иғтибарға лайыҡ: “*бәкеһе менән йыланды үлтерә, уны нәҙек кенә итеп телгеләп ялғай ҙа, бау итеп, шуға йәбешеп тауҙан төшә*” [Архив, ]. “Ҡырҡатар батыр” тигән әкиәттә кеше тиреһенән эшләнгән бауҙы (ҡайышты) бер кем дә өҙә алмай [БХИ, 1978, 111].

Әкиәт персонаждары буйынса ла иғтибарға лайыҡ урындар бар. Мәҫәлән, тылсымлы ярҙамсы функцияһын үтәгән, Шәмшруҡ исемле алтын төкөргән алтын ҡош та, Ҡырыҫ ҡанат тигән ҡош та баҫылып сыҡҡан әкиәттәр араһында әлегә тиклем табылғаны булманы, ә “алтын ҡоҫҡан ишәк” [БХИ, 1976 (2), 301], “уң аяғынан алтын, һул аяғынан көмөш ҡойолған ҡыҙ” [БХИ, 1976 (1), 220], “алтын сәсле малай (ҡыҙ)” [БХИ, 1976 (1), 236, 262] образдары бар; “Донъя яҡтыртып осоп килгән ҡош” (“Алтын ҡош” әкиәтендә).

Батшаның алтын ҡошто бикләп ҡуйған урыны ла ғәҙәти урын түгел – суйын келәт һәм унда “*ҡош тонсоҡмаһын өсөн башы һыярлыҡ ҡына тишек ҡалдырғандар*”. Келәттең суйындан булыуы әкиәттә алтын ҡоштоң ни тиклем баһаһы ҙурлығын, уны һаҡлауҙың мөһимлеген аңғарта. Башҡа әкиәттәрҙә “алтын ҡош ситлектә ултыра” [БХИ, 1976 (1), 90, БХИ, 1976 (2), 53]. Суйын мунса, түңәрәк суйын өй “Етегән батыр” әкиәтендә лә бар [БХИ, 1978, 132, 133]. Тик унда геройға батшаның эштәрен үтәгәндә шунда инергә тура килә. Был осраҡта суйындан яһалған ҡаралты батша ҡушҡан эштең ҡатмарлылығына ишара булараҡ ҡабул ителә.

З. Биишева яҙып алған әкиәттәрҙең икәүһендә “Уңға киткән – уңар , һулға киткән – үлер” тигән һәм шуның варианты булған “*Уңға киткән – уңар, һулға киткән – туңар*” (“Алтын ҡош”) тигән медиль формула осрай, тик барыһында ла формуланың аҙаҡҡы өлөшө ҡалыплашҡанса бирелмәй: “*һулға киткән – тере ҡалмаҫ*” (Балыҡсы ҡарт), “*һулға киткән – әйләнеп ҡайта алмаҫ*” (Алтын тау). Был миҫалдарҙа әкиәт стиленең йәғни формуланың “боҙолоуы” күренә. “Ҡырыҫ ҡанат” әкиәтендә “егет музыкальныйға, ҡыҙ медицина мәктәбенә уҡырға инә” тигәне әкиәткә яңы заман күренештәре килеп инеүенә ишаралай. Ошондай күренешкә “Алтын балдаҡ” әкиәтендә лә тап булабыҙ: “*Егет дейеүҙәргә бик матур бер ҡала, заводтар ҡорорға ҡуша. Егет был ҡалалағы заводтарҙа дейеүҙәрҙе ҡушып автомашиналар эшләтә башлай. Шулай итеп, хәҙерге автомашиналарҙы иң элек шул дейеүҙәр эшләп сығарған. Йәш саҡта мин үҙем дә ул заводта бер аҙ эшләп киткәйнем”* [Архив, 162], – тип тамамлаған әкиәтен информант. Был уның оҫта әкиәтсе булыуына ишаралай, сөнки әкиәтең бөтөмө традицион формулаларға ауаздаш.

XX быуаттың тәүге яртыһы аҙаҡтарында һөйләү теленән яҙып алынған әкиәттәрҙән жанрҙың шул замандағы торошон, йәшәү рәүешен билдәләп була. Күренеүенсә, был осорҙа героик характерҙағы әкиәттәр халыҡ хәтерендә яҡшы ғына һаҡланып, йәшәүен дауам иткән, ә хәҙерге экспедицияларҙа улар бик һирәк кенә осрап ҡуя.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһынан сыҡҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең береһе, халыҡ яҙыусыһы Зәйнәп Биишева эшмәкәрлегенең яңы битен астыҡ. Уның әҫәрҙәренең теле бай, халыҡсан булыуына яҙыусының тыуған халҡының теленә, ижадына битараф булмауы ла йоғонто яһағандыр, күрәһең. Әҙибә тыуған районында халыҡ ижады өлгөләре йыйыуҙа ғына түгел, дилектология экспедицияһында ла ҡатнашып, бай һүҙ материалдары йыйып архивҡа тапшырған [Архив, ф.3, яҙма. 2, һаҡл. бер. 149]. Уның ҡулъяҙмалары Өфө федераль ғилми тикшеренеү үҙәгенең ғилми архивында һаҡлана һәм тикшеренеүселәрен көтә.

## Әҙәбиәт

Архив – Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең ғилми архивы. Фонд 3, яҙма 2, һаҡлау берәмектәре 143, 149.

БХИ, 1976 (1) – Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. 1-се китап / Төҙ., М.Х. Минһажетдинов һәм Ә.И. Харисов. Инеш мәҡәлә авт. М.Х. Минһажетдинов. Аңлатм. авт. Л.Г. Бараг менән М.Х. Минһажетдинов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. 376 б.

БХИ, 1976 (2) – Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. 2-се китап / Төҙ. М.Х. Минһажетдинов һәм Ә.И. Харисов. Инеш мәҡәлә авт. М.Х. Минһажетдинов. Аңлатмалар авторҙары Л.Г. Бараг менән М.Х. Минһажетдинов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. 376 б.

БХИ, 1978 – Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. 3-сө китап / Төҙ. Н.Т. Зарипов менән М.Х. Минһажетдинов. Инеш мәҡәлә авт. Н.Т. Зарипов. Аңлатм. авт.-ры Л.Г. Бараг менән Н.Т. Зарипов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978. 352 б.

**G. R. Husainova**

*Order of the Badge of Honour Institute of History,*
*Language and Literature UFRC Russian Academy of Sciences*
*October Avenue, 71, Ufa, 450054, Russia*
*E-mail: bashfolk@yandex.ru*

## SPIRITUAL TREASURES FROM THE SCIENTIFIC ARCHIVE

The Scientific Archive of the UFIC holds priceless samples of folk art. Most of them are published and put into scientific circulation. Among the unpublished samples, in addition to texts in the Old Turkic language, Latin, Arabic script, there are also materials in Cyrillic, i.e. Bashkir language, which did not reach the hands of researchers. This article is devoted to the analysis of 11 texts of fairy tales recorded in 1946 in the Kugarchin district by the national writer Z.A. Biisheva from two informants. We determined their plot types according to the international Aarne-Thompson-Uther catalog. Judging by the texts, these are mainly fairy tales of a magical and heroic nature, the plots of which are well known and included in the books of the multi-volumes “Bashkir Folk Art” in Bashkir and Russian languages. Distinguishing places, features of poetics and style of fairy tales introduced into the scientific circulation are noted.

*Keywords*: fairy tales, plot type, options, style, poetics.

## References

Archive of the Ufa Federal Research Center. Fund 3, bordereau 2, individual file 143, 149

Bashkir folk art. Fairy tales. Prince 1 / Comp. M.Kh. Mingazhetdinov and A.I. Harisov. Auth. entry Art. M.Kh. Mingazhetdinov. Auth. commentary. L.G. Barag and M.Kh. Mingazhetdinov. Repl. ed. N.T. Zaripov. Ufa: Bashkignoizdat, 1976.376 p.

Bashkir folk art. Fairy tales. Book Two / Comp. M.Kh. Mingazhetdinov and A.I. Harisov. Auth. entry Art. M.Kh. Mingazhetdinov. Auth. commentary. L.G. Barag and M.Kh. Mingazhetdinov. Repl. ed. N.T. Zaripov. Ufa: Bashkignoizdat, 1976.376 p.

Bashkir folk art. Fairy tales. Book Three / Comp. N.T. Zaripov and M.Kh. Mingazhetdinov; author will enter. Art. N.T. Zaripov; author commentary. L.G. Barag and N.T. Zaripov. Ufa: Bashknigoizdat, 1978.352 p.